256-2



Эшселәр сафын нисек тулыландырырға?

2



Бал ҡорттары һымаҡ тырыш үҙҙәре!

3



Ҡумыҙсылар һәм өҙләүселәр бишенсегә ярышты

4



Театрға уны күрергә генә килгәндәр бар...

4


# Башҡортостан

РЕСПУБЛИКАНЫҢ ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ ГӘЗИТЕ

917 йылдың 14 июненән сыға

№ 70 (26922)

www.bashgazet.ru

әзитте ойоштороусылар – Башҡортостан Республикаһы
әүләт Йыйылышы – Ҡоролтай, Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте

2015 йыл, 14 апрель, шишәмбе
1436 һижри йыл, йомадиәл ахыр айының 25-се көнө


"ӘҘӘБИ НАҒЫШ" МАРАФОНЫ

## Данлы Бабич, моңло Нәжми ерендә




## Байрам айҡанлы ҡотлау



***Башҡортостан Республикаһы Башлығы Рөстәм Хәмитов республика православныйҙарын Пасха менән ҡотланы.***

Унда былай тиелә: *"Республикалағы барлыҡ православныйҙарҙы Изге Христостың терелеүе байрамы айҡанлы ихлас ҡотлайым! Рәсәйҙә иң әһәмиәтле христиан байрамдарының береһе булған Пасха күп быуатлыҡ рухи-әхлаҡи ҡиммәттәргә — һөйөүгә һәм шәфҡәтлелеккә, яҡындарың хаҡында хәстәрлеккә, ғәҙеллеккә һәм тырышлыҡҡа — тоғролоҡто кәүҙәләндерә, тормош юлында кешеләргә ышаныс һәм көс-ҡеүәт бирә.*

*Ошо өмөт һәм йәшеү тантанаһы байрамы һәр йортҡа бәхет, тыныслыҡ һәм именлек килтерһен. Йылы яҙ көндәре йөрәктәрегеҙҙе шатлыҡ һәм оптимизм менән һуғарһын. Барығыҙға ла иң изге теләктәремде еткерәм!"*

## Баҫыу эштәренә әҙербеҙ

***Республика аграрийҙары сәсеү кампанияһына әҙер тиергә мөмкин.***

– Орлоҡ – 99, минераль ашламалар — 48, тракторҙар – 95, сәсеү агрегаттары 98 процентҡа әҙер. Быйылғы күрһәткестәр

алынған ауыл хужалығы техникаһының хаҡын ҡаплауға 250 миллион һум йүнәлтелде. Май-июнь айҙарында ошо маҡсатта өҫтәмә рәүештә 200 миллион һум бүленәсәк.

Әле Ауыл хужалығы министрлығы

(Аҙағы 4-се биттә).

АКЦИЯЛАР

# Башҡортса диктант яҙҙыҡ

***Башҡорт дәүләт университеты һәм республика Хөкүмәте ҡарамағындағы “Башҡортостан халыҡтары телдәре тураһында” Законды тормошҡа ашырыу буйынса терминологик хеҙмәт “Башҡорт телендә төбәк диктанты” акцияһын ойошторҙо.***

Тәүге тапҡыр уҙғарылған сарала Өфөлә 100-ҙән ашыу кеше ҡатнашты, Бөре, Сибай, Стәрлетамаҡ һәм Нефтекама ҡалаларында ла онлайн режимында туған телде белеү кимәлен тикшереп ҡаранылар. Студенттарҙан һәм уҡыусыларҙан тыш, акцияға яҙыусылар, журналистар, уҡытыусылар ҡушылды.

Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығы айҡанлы диктант Яныбай Хамматовтың “Башҡорттар китте һуғышҡа...” романынан өҙөк нигеҙендә төҙөлдө. Тексты Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың халыҡ артисы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры актеры Хөрмәтулла Үтәшев уҡыны.

Университет уҡытыусыларынан торған эксперт комиссияһы тиҙҙән эштәрҙе тикшерәсәк. Һөҙөмтәләрҙе диктанттан һуң биш эш көнө үткәс проекттың regdict.bashedu.ru сайтында белергә мөмкин.

Л. ДӘҮЛИЕВА.

# Сибайҙар дәррәү ҡушылды

***Башҡортса төбәк диктанты Сибай ҡалаһының ике белем усағында яҙылды. БДУ-ның Сибай институтында уны онлайн режимында үткәреү күҙаллана ла, техник сәбәптәр арҡаһында тексты филология фәндәре кандидаты Рида Латипова уҡыны.***

Сарала 200-ҙән ашыу кеше ҡатнашты, улар араһында студенттар, уҡыусылар, уҡытыусылар, китапханасылар, оло йәштәгеләр ҙә бар ине. Профессор, филология фәндәре кандидаты Ғәҙилә Бүләкова әйтеүенсә, акция бик урынлы һәм файҙалы. Туған теленең матурлығын тойған, уның нескәлектәрен белгән кешегә әлеге һынау әллә ни ауырлыҡ тыуҙырмай, тине ул.

30 йылдан ашыу диктант яҙғаны булмаған Нәзирә Килдейәрова үҙенсәлекле, “үҙебеҙсә, саф башҡортса” сараны көтөп алған. Акцияға уҡыусыларҙың да дәррәү ҡушылыуы ҡыуаныслы. Ҡаланың 10-сы мәктәбенән балаларҙы диктант яҙырға башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Алмабикә Шахмөхәмәтова алып килгән. IX класс уҡыусыһы Рәмзил Ыласынов туған телен яҡшы белеүе һәм диктантты хатаһыҙ яҙасағы хаҡында ышаныс менән әйтһә, уның һабаҡташы Зарина Игишева ла өмөтлө йылмайҙы.

Диктант яҙыусылар араһында урыҫ телендә аралашҡан студенттарҙың, уҡытыусыларҙың да булыуы иғтибарға лайыҡ. Туған теленән белемен һынап ҡарарға теләүселәр юҡ түгел, тимәк. Тик райондарҙан да күпләп саҡырырға ине халыҡты – ойоштороусыларға уйланырға урын бар.

Ҡала хакимиәтенең мәғариф бүлегендәге туған телдәр буйынса методист Айһылыу Моталлапованың тырышлығы менән Рамазан Өмөтбаев исемендәге башҡорт лицейында уҡыусылар, ата-әсәләр, уҡытыусылар ҙа башҡортса диктант яҙҙы. Улар яҙма эш башҡарып ҡына ҡалманы, бер аҙға мәктәп йылдарына әйләнеп ҡайтып, хәтирәләрен яңыртты.

К. УСМАНОВА.



Автор фотоһы.